# Ғәйнан Хәйри

*(1903—1938)*

**Яҙыусының тормошо.** Ғәйнан Хәйри (Тимерғәйнан Хәйретдин улы Хәйриев) элекке Өфө өйәҙе Бәләкәй Күҙәй олоҫо (Башҡортостан республикаһының хәҙерге Нуриман районы) Иҫке Күл ауылында 1903 йылдың 13 июнендә урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Иҫке Күл — элекке олоҫ үҙәге булған ҙур ауыл. Егерменсе йылдарҙа кантондар ойошторолгас, Күҙәй кантонының үҙәгенә әйләнә. Һәр хәлдә, Иҫке Күл ауылы XX быуат башында ауылдарҙа барған тарихи-иждтимағи ваҡиғаларҙың уртаһында була.

Ғәйнандың атаһы Хәйретдин, мәҙрәсә белеме лә ала алмаған, бар ғүмере ҡара эш менән үткән крәҫтиән, улын да үҙенә ярҙамсы итергә, эшсән игенсе, урмансы итеп тәрбиәләргә тырышҡан. Уны йәшләй эшкә күндергән. Ғәйнан башта үҙ тыуған ауылы мәҙрәсәһендә һабаҡ алған. Ҡалған ваҡытын атаһы хужалығында эшләп йөрөгән.

Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы осоро уның бала һәм үсмер саҡтарына тура килә. Ул ошо тарихи ваҡиғаларҙы үҙ тормошона ла киҫкен яңылыҡ индергән боролош тип иҫәпләй. «Октябрь революцияһының ҡеүәтле тулҡыны мине консерватив ғаиләнән тартып алды һәм минең көсөм еткән йәмғәт эшендә файҙаланды, — тип яҙҙы һуңынан Ғ. Хәйри. — Ҡыҫҡаса әйткәндә, мин революцион рухта тәрбиәләндем, шуға күрә мин үҙемде уның улы тип тоям һәм киләсәктә лә шулай һанаясаҡмын». Йәгни ул үҙен ҡырыҫ холоҡло, ҡаты ҡуллы ата тәрбиәһенән ҡотолоп, революцион рухтағы яңы йәмғиәт тәрбиәһенә күскән улан итеп тоя. Ғ. Хәйриҙең әҫәрҙәрендә, бигерәк тә «Боролош» романында, ата менән ул мөнәсәбәтенең ҡырҡа яҡтары сағылышы, күрәһең, мәғлүм дәрәжәлә үҙ яҙмышынан да килә.

Революция тулҡындары менән Ғәйнан Хәйри йәмғиәт эштәренә лә бик иртә тартыла. 1920—1922 йылдарҙа ул Яңы Күл ауылында китапхана мөдире булып эшләй. Күҙәй кантонының халыҡ мәғарифы һәм профсоюз органдарында ла эшләп ала. Кантондың комсомолдар хәрәкәтендә лә әүҙем ҡатнаша.

Ләкин атаһы комсомол сафына инеүҙән һәм йәмғәт эштәренә ҡатнашыуҙан ҡырҡа тыйғас, Ғәйнан ата йортон бөтөнләйгә ташлап ситкә сығып китә. 1922 йылдың көҙөндә Ырымбурҙағы башҡорт педтехникумына уҡырға инә. Шунда комсо-

молға ағза итеп алына, техникумдың йәмәғәт эштәре уртаһында ҡайнай. Техникум белем алыуға ғына түгел, ижад эшенә лә киң юлдар аса: әҙәбиәт тормошо ғөрләп тора; Сәғит Ағиш, Баязит Бикбай, Ғабдулла Амантай, Зәйнәб Биишева, Төхфәт Морат кеүек йәш ҡәләмдәштәре менән әҙәби түңәрәктәргә йөрөйҙәр, әҙәби стена гәзиттәре сығаралар, әҙәби кисәләр үткәрәләр, Башҡортостан матбуғатына яҙышалар.

Комсомолдың Башҡортостан өлкә комитетының саҡырыуы буйынса Ғәйнан Хәйри 1924 йылда Өфөгә күсә һәм Өфө район комитетында, «Башҡортостан», «Яңы ауыл» гәзиттәре редакцияһында эшләй. 1925 йылда Арғаяш кантонына эшкә ебәрелә. Унда Мөхәммәтҡолой олоҫоноң комсомол комитеты секретары итеп һайлана. Ләкин бында уға оҙаҡ йәшәргә тура килмәй, үпкә ауырыуы көсәйеп китеү сәбәпле дауаланырға Өфөгә ҡайтырға мәжбүр була. Һауыҡҡас, «Белем» журналының секретары, «Башҡортостан йәштәре» гәзитенең редакторы урынбаҫары вазифаларын башҡара. 1927 йылдан «Яңылыҡ», «Трактор» журналдарының яуаплы секретары була. Йәғни Ғәйнан Хәйри тормошоноң егерменсе йылдарҙағы Өфө дәүере йәштәр эше, журналистика менән туранан-тура бәйләнешле. Үҙ белемен күтәреүҙе Башҡортостан педагогия институтында филология факультетында ситтән тороп уҡыуы менән дауам итә.

1927 йылда Башҡортостан пролетар яҙыусылар ассоциацияһын (БАПП) ойоштороуҙа Ғ. Хәйри яҡындан ҡатнаша һәм уның идараһының яуаплы секретары итеп һайлана. Шулай әҙәби хәрәкәттең үҙәгендә ҡайнап, яҡшы эшләп, ижад эше менән янып шөғөлләнеп йөрөгәнендә Ғ. Хәйриҙе «Үҫеү» тигән йәштәр ижади ойошмаһы төҙөргә йыйына икән, тип нахаҡҡа ғәйепләп, 1929 йылда эшенән, партиянан сығаралар. Эштән сығарылған, ижад эшенән ситләтелгән, әҫәрҙәре баҫтырыуҙан тыйылған яҙыусының шундай ҙур ҡайғылары сәләмәтлеген ҡаҡшатыуға ла килтерә, 1930 йылда уның үпкә ауырыуы йәнә көсәйеп китә. Ул үтә йәшләй инвалидлыҡ пенсияһына сығырға мәжбүр була. Оҙаҡ йылдарға һуҙылған туберкулез ауырыуы уны 1938 йылдың 16 октябрендә яҡты донъянан да алып китә.

35 йыл йәшәгән Ғәйнан Хәйриҙең ижад ғүмере лә бик ҡыҫҡа. Уның ныҡлап дәртләнеп ижад итеү осоро бары 7—8 йыл менән иҫәпләнә. Шул ҡыҫҡа ғына ваҡытта ла ул үҙ талантын танытырға, башҡорт әҙәбиәтен матур поэзия өлгөләре, билдәле хикәйәләре һәм повестары менән байытырға өлгөрә. Әҙәбиәтебеҙ тарихында ул юйылмаҫлыҡ һәм онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдырҙы.

**Ғәйнан Хәйри — шағир.** Бик күп яҙыусылар кеүек, Ғәйнан Хәйри үҙ ижадын поэзиянан башлай. Йәш кешенең йөрәгендә ижад рухы ғәҙәттә шиғри сатҡы булып та ҡабына. Шуның шикелле, башҡорт халыҡ поэзияһы, Аҡмулла, М. Ғафури, Ш. Бабичтар шиғриәте рухында тәрбиәләнгән Ғ. Хәйри Ырымбурҙа уҡый башлағас та шиғриәткә күңеле менән тартыла, С. Агиш, Ғ. Амантай, Б. Бикбай, З. Биишевалар менән ярыша-ярыша шиғырҙар яҙа, әҙәби түңәрәктә бергәләшеп уларҙы тикшерешә, институт сәхнәләренән уҡый.

Ғәйнан Хәйриҙең шиғырҙар менән матбуғатта күренеүе 1923—1924 йылдарға ҡарай. Улар «Яңы юл» журналында, «Йәш юҡһыл», «Баш-

ҡортостан» гәзиттәрендә баҫыла башлай. Йәш шағирҙың тәүге баҫма һүҙе 1923 йылда сыҡҡан «Октябрь йыры» шиғыры менән асыла. Үҙен октябрь улы тип хис иткән Ғ. Хәйри тәүге шиғырын да пролетар революцияһына бағышлай:

*Мәңгелек янған ҡояш ялҡынынан*
*Көслө көрәш ялҡыны,*
*Шунда янды алла, батша,*
*Янды ҡоллоҡ, алтыны.*

*Яңғырай, ишетәм, Октябрҙән*
*Ер шарының таң йыры,*
*Йырлай заводтар йөрәге,*
*Ай ураҡлы тау ҡыҙы, —*

ти йәш шағир.

Уның 1927 йылда «Беҙҙең яҙ» исемле шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтығы баҫылып сыға. Был китабын Октябрҙең ун йыллығына арнай. Күпселек поэтик әҫәрҙәре яңы замандың революцион рухы менән һуғарылған. «Октябрь тураһында» тигән шиғырында автор үҙенең утлы-дауыллы революция көндәрендә көрәшсе булып үҫеп етмәүенә үкенә биреп ҡуйғандай итә.

*Ниңә ун ғына йыл элегерәк,*
*Тыуmағанмын көрәш көнөнән?*
*Октябрҙә көрәшсе була алмау*
*Бик оялта мине үҙемдән, —*

тип ебәрә ул.

«Беҙҙең яҙ» китабының исеме үк әйтеп тороуынса, шағир поэзияһында яҙ миҙгеле кешелек яҙы образы рәүешендә һынландырыла. Яңы йәмғиәтте — социализмды төҙөү — уның осон кешелек яҙы башланыуы. Ярлы, ҡараңғы иҫке ауылға алмапҡа машиналы, электр утлы яңы ауылдың килеүен дә яҙғы яңырышҡа тиңләй. «Ауыл йырлай хәҙер икенсе йыр, музыкаһы уның — машина», — ти. Иҫкелекте, иҫке хөрәфәттәрҙе емереп, яңылыҡҡа ынтылған йәштәрҙе, комсомолецтарҙы маҡтап йырлай. «Миллиондар» шиғырында ул йәштәргә мөрәжәғәт итеп былай ти:

*Әиҙә, Фатюк, Лиза, Лена —*
*Барыбыҙ бергә!*
*Һин дә, мин дә,*
*Сыуаш ҡыҙы ла!*
*Ә һин ниңә сафтан ситтә,*
*Башҡорт ҡыҙы — ҡара ҡаш?*
*Ас йөҙөң, ас,*
*Әиҙә сафҡа теҙел,*
*Яңы көндәреңә ишек ас!*

Киләсәккә өмөт менән ҡарағанда, тырыш, алдынғы йәштәрҙең үҫеүен күргәндә, шулар хаҡында яҙғанда Ғ. Хәйри поэзияһы оптимизм рухы менән тулы. Шиғриәтендә яҡты буяуҙар, шат тауыштар өҫтөнлөк итә. Яҙғы, йәйге тәбиғәткә арналған лирик шиғырҙары матур, биҙәкле.

Әммә ил йәшлеген, йәштәрҙәге энтузиазмды дәртләнеп йырлаған шағир «Беҙҙең яҙ» йыйынтығына ингән ҡайһы бер шиғырҙарында, тормоштағы ауырлыҡтарға, йәмһеҙ күренештәргә бошоноп, «күҙ-йәш аралаш ауыр йырҙар»ҙы һуҙғылаңы. Уның «Ике йыр», «Йөрәк», «Минут», «Ҡылдар» ише шиғырҙарында төшөнкө, күңелһеҙ уй-тойғолар ҡуйырып китә, шағир пессимизмға ла бирелгәндәй итә. Ул үҙе теләгәнсә илдең тиҙ яңырмауына, һаман ҡомһоҙ байҙар йәшәүенә, тормошта аламалыҡтар күплегенә борсола, шуларҙы күреп йөрәге әрней. Уның «Күсмә мөхәббәт», «Бухгалтер» тигән поэмаларында ҡайһы бер йәштәр араһындағы әхлаҡи түбәнлек, енси аҙғынлыҡ күренештәрен ғибрәт итеп тасуирлауы ла ауыр тойғолар уята.

Ғәйнан Хәйри егерменсе йылдар аҙағына табан йәмғиәт тормошонда,

көнкүрештә лә иҫкелекте яңылыҡ еңә барыуына, бының ауыр көрәштәр аша килеренә төшөнә, күрә бара. Быны ул «Бөгөнгө йыр» шиғырында шулайыраҡ аңлата:

*Ҡайғырмағыҙ, дуҫтар,*
*Тауға менгән саҡта*
*Тын ҡурыла,*
*Күкрәк ҡыҫыла,*
*Әгәр арыһа бәрәү, икенсеһе*
*Ҡул һуҙырға тейеш дуҫына!*
*Тар һуҡмаҡтан килдем*
*Киң юлдарға —*
*Тормош гөрләп торған илемә,*
*Ҡояш менән алтын башаҡтар*
*Бәреләләр минең йөҙөмә.*
*Беҙ һыуҙарҙан көслө ағабыҙ,*
*Беҙ уттарҙан көслө янабыҙ,*
*Кисә хыял иткән нәмәләрҙе*
*Беҙ тормошта бөгөн табабыҙ.*

Егерменсе йылдарҙағы әҙәби тәнҡит Ғәйнан Хәйриҙең ҡайнар йөрәкле шәхесе һәм иләҫ-миләҫлерәк шиғриәте тураһында былай тигәйне: «Ғ. Хәйри артыҡ дәрәжәлә һиҙгер йөрәкле, хыялланыусан шағир ул. Уның тәбигәте диңгеҙ һауаһы кеүек: хәҙер генә ҡояшлы, көләс, уйнаҡ, оҙаҡ та үтмәй — уның хыял күген хәҙер үк томан, болот та ҡаплап ала. Шунлыҡтан уның лирикаһында яҡты күренештәр менән күләгәләр, шатлыҡ менән һағыштар нәүбәтләшәләр». Поэзия, бигерәк тә лирика, кешенең уй-тойғоларының төрлө хәлдәрен, шатлыҡ һәм ҡайғыларын, һағыш һәм икеләнеүҙәрен, шик-шөбһәләрен гәмәлдә нисек бар шулай тасуирлауы менән көслөрәктер һәм күңелдәргә үтемлерәктер ҙә ул. Шулай икән, шағир ҙа эҙләнеүҙәр аша үҫә бара тигән һүҙ.

**Ғәйнан Хәйри — прозаик.** Үҙе иҫән саҡта Ғ. Хәйриҙең «Беҙҙең яҙ» тигән берҙән-бер шиғыр китабы сыҡты. Ул күберәк проза әҫәрҙәре яҙыу менән шөғөлләнде. Улар бер-бер артлы китап булып сыға торҙо: «Кооператорҙар. Повесть һәм хикәйәләр» (1926), «Башҡорт ауылында. Очерктар» (1927), «Онотолған экиәт. Очерктар» (1927), «Сабата. Очерктар» (1928), «Ҡатын. Повесть» (1931). Быларҙан тыш журналдарҙа тағы «Бүлмә», «Мәхфүзә» исемле повестары донъя күрҙе. «Боролош» тигән ҙур күләмле романын яҙҙы.

Шулай итеп, Ғәйнан Хәйри асылда талантлы прозаик булып танылды һәм проза әҫәрҙәре менән башҡорт әҙәбиәтендә үҙенең хаҡлы урынын тапты.

Хикәйә һәм очерктары Ғәйнан Хәйри өсөн яҙыусы ҡәләмен үткерләү мәктәбе булды. Ул күберәк үҙе күргән, үҙе яҡшы белгән ваҡиғалар, кешеләр тураһында яҙҙы. Хикәйәләрҙең күпселеге һәм очерктары автобиографик характерҙа булыуы уҡ шуны һөйләп тора.

«Яңы осорҙоң яңы геройҙары» тигән тәүге хикәйәһе үк автобиографик әҫәр. Ауыл балаһының нисек үҫеүе, мәҙрәсәлә уҡыуы, китапханасы булып эшләүе, ҡалаға барып уҡырға ынтылыштары матур ғына хикәйә ителә. Улын мулла итергә тырышҡан ата менән белемгә, яңылыҡҡа ынтылған улдың ҡаршылыҡтары ла Ғ. Хәйриҙең үҙ тормош һуҡмаҡтарын хәтерләтә. Хикәйәнең геройы Хәлил дә: «Атай, мин һеҙҙең балағыҙ булып үҫмәнем, мин халыҡ балаһы, мин тормош балаһы», — тип ебәрә. Хәлил, ысындан да, яңы осор балаһы, замана улы.

Яңы осорҙоң яңы геройҙарын Ғ. Хәйри «Сабата», «Командир», «Онотолған экиәт» хикәйәләрендә лә һүрәтләүен дауам итә. Уларҙы йәш

үсмерҙең ауылдан сығып, комсомол сафында тәрбиәләнеп, мәктәп тамамлап, белемле, мәҙәниәтле булып китеү юлында яңы кеше булып үҫеүе, формалашыуы сағылдырыла. Йәш кеше тормоштоң төрлө ауырлыҡтарын да кисә, иҫке ғөрөф-ғәҙәт, хөрәфәттәрҙе йырып сыға, белем алыр өсөн төрлө ҡаршылыҡтарҙы, кәртәләрҙе ашатлап үтә. Мөхәббәт уттарында яна, йәшлеге менән ҡайсаҡ яңылышҡылай ҙа, әммә гел алға ынтыла.

Ғәйнан Хәйри хикәйәләренең күбеһе иҫтәлек формаһында яҙылған. Унда йәш кешенең тормош юлының ҡайһы бер эпизодтары хәтерләүҙәр рәүешендә киҫәк-киҫәк кенә итеп тасуирлана. Автор ауылдың ғәҙәти тормош-көнкүрешен, йәштәрҙең киске уйындарын матур һүрәтләй. Һәр хәлдә, егерменсе йылдарҙағы ауыл тормошо, белемгә һыуһаған, яңылыҡҡа ынтылған йәш кешенең образы күҙ алдына баҫа.

«Башҡорт ауылында» тигән ҙур очеркында егерменсе йылдар башҡорт ауылы, уның төрлө ҡатлам кешеләре айырыуса асыҡ яҡтыртыла. Автор был әҫәрен үҙе «башҡорт халҡының синыфтарға бүлгеләнеүен һәм көнкүрешен өйрәнеп яҙҙым», — ти. «Башҡорт ауылында» очеркының нигеҙендә Ғ. Хәйри үҙе эшләп алған Арғаяш кантонының Мөхәммәтҡолой ауылында булған ваҡиғалар, реаль кешеләр тормошо ята. Яҙыусы күргән-белгәнен, ваҡиғалар нисек булғанын шул көйө күсермәй, әлбиттә. Уларҙың идея яғынан һәм тәрбиәүи йәһәттән мөһим тигәндәрен генә һайлап ала һәм художестволы дөйөмләштерә. Бында ла башҡорт ауылының ҡайһы бер ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, көнкүреше, уйындары, ауылға беренсе трактор килеүе бик матур итеп тасуирлана. Иҫкелек менән яңылыҡтың көрәшен, синфи көрәште күрһәтергә тырыша.

Ошо әҫәре өҫтөндә эшләгән йылды яҙған бер мәҡәләһендә Ғ. Хәйри былай тигәйне: «Үҙен яҙыусы итеп хисаплаған кеше үҙе өсөн генә түгел, бәлки башҡаларға билдәле бер идея менән тәрбиә, рухани аҙыҡ биреү һәм үҙ синыфының идеологияһын көүҙәләндереү осөн яҙа. Был яғы менән беҙ, матур әҙәбиәттең тышҡы кейеменән артығыраҡ, эске йөкмәткеһенә әһәмиәт бирәбеҙ». Был әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, һәм гәмәлдә лә шулай, Ғ. Хәйри үҙе лә хикәйәләрендә һәм очерктарында «матур әҙәбиәттең тышҡы кейеменә» — теленә, стиленә, композицияһына ҡарағанда уның идеяһына, синфилыҡ яғына күберәк иғтибарын туплай, әҙәбиәтте идеология көрәше ҡоралы итеп ҡарай. Шуға әҫәрҙәренең конфликты ла синфи көрәш менән бәйле бер төрлө схемаға ҡорола, геройҙары ла йыш ҡына бер ҡалыплы килеп сыға.

**«Кооператорҙар» повесы.** «Башҡорт ауылында» тигән китабын тамамлаған йылды (1926 йыл) Ғәйнан Хәйри «Кооператорҙар» исемле повесын да яҙып бөтә. Унда очерк китабындағы материалдарҙы ла киң файҙалана.

Шул уҡ егерменсе йылдарҙағы ауыл тормошо. Ауылдың байы-ярлыһы, ҡарты-йәше. Көнкүреш һәүетемсә аға кеүек.

Яҙыусы тасуирлауынса, ауылдың иртәнге музыкаһы ҡолаҡҡа яғымлы: йылға тыныс ҡына ағып ята, тирмән быуаһында ғына һыу шаулай. Һеҙәк тау ҡырында йөрөгән аттарҙың муйындарындағы ҡыңғырау тауышта-

ры, һыйырҙар мөңрәүе, көтөүсенең ҡысҡырғаны ишетелә.

Әммә повестың башында уҡ авторҙың ауыл тәбиғәтен кинәйәләп тасуирлағаны ла һиҙелә: «Тау менән ауыл араһын киҫеп, йыланланып, һыу юрғалай. Йылғаның тау яҡ ярҙарында, күп йылдарҙы күреп, йәнһеҙ шаһит булып ултырған өйәңкеләр бар. Уларҙың ботаҡтары ҡартайған. Япраҡтары ла юҡ. Тамырҙары ҡыҙыл балсыҡлы ярға аҫылынған. Уларға ҡараһаң, улар һиңә:

— Беҙ ауабыҙ. Беҙгә көн бөттө, — тигән шикелле тойола. Ул шулай ҙа, сөнки яр ситендә йәш талдар үҫә. Уларҙың япраҡтары ла оҙондар, матурҙар. Уларҙы иртәнге шаян томан да ярата...»

Был тамаша — ғүмерҙәре аҙ ҡалған ҡарт өйәңкеләр, килерҙәре алда йәш талдар — артабан хикәйә ҡылынасаҡ иҫке синфи ҡатламдарҙың бөтөрөнә, яңы йәш быуындың киләсәгенә бер ишара. Шулай тасуирҙың артабан айы ауған иҫке мәсетле, мулла өйлә, Ғәзиз кулак йортло урамға ялғанып китеүе лә тәбиғи. «Ауылдың мәркәзе элек шул ине, — ти автор. — Уның йөрәге лә шул булды. Ә хәҙер тәпәш йорттарҙа тороусы ғаиләләр ауылдың капитандары булырҙар».

Повестың персонаждары бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ике төркөмгә айырыла. Бер яҡта — Ғәзиз кулак, Яхия мулла, Шафиҡ сауҙагәр, Санька тирмәнсе һәм уларҙың эйәрсендәре, икенсе яҡта — Шакир, Әптерәш, Зөһрә кеүек комсомолецтар, Минһаж һымаҡ аңлы крәҫтиәндәр.

Сюжет һыҙығы һәм конфликт төйөнө ауылда сауҙа кооперацияһы ойоштороу һәм уның тирәһендәге мажаралар менән бәйле. Кооперативты төҙөп, уның идараһын һайлау йыйылышында, ауылда крәҫтиәндәр араһында алдан тейешенсә аңлатыу, әҙерлек эштәре йүнләп алып барылмағанлыҡтан, идараға Ғәзиз, уның улы Шафиҡ сауҙагәр, Санька арендаторҙар үтәләр. Йәнәһе, улар эш рәтен, сауҙа эшен яҡшы беләләр, тип күпселек халыҡ ышаныбыраҡ та ҡарай. Ләкин ышаныс аҡланмай: кооперация рәйесе Ғәзиз бай үҙ яҡынярандарының файҙаһын ғына ҡайыра: сепаратор килһә — үҙҙәренә, бүтән яҡшы тауар икән — дуҫ-иштәренә. Ҡалғандарға — ҡалдыҡ-боҫтоҡ. Өҫтәүенә, кооперативтың дөйөм байлығын, уртаҡ аҡсаһын үҙләштереп яталар. Ревизия-тәфтиш комиссияһының рәйесе Шакир былар өҫтөнән тикшереү үткәреп, гәйептәрен, мутлыҡтарын асайым, кооперативҡа яңынан һайлау үткәрәйем тиһә, Ғәзиз бай үҙ ҡуштандары менән кооперативты үҙҙәре төнөн талап, гәйепте Шакирҙың үҙ өҫтөнә ауҙаралар. Уның кеҫәһенә кооперативтың икенсе асҡысын һалып һалалар һәм бур итеп танытмаҡсылар. Ҡулға алдырталар. Ҡырын эш, кем бурлығы, әлбиттә, аҙаҡ асыҡлана. Кооперативты талаған Ғәзиз, уның ҡуштандары ҡулға алына. Кооператив идараһына яңы рәйес итеп Шакир, яңы ағзалар һайлана. Йәш көстәр «ҡарт өйәңкеләр»ҙе — байҙарҙы, сауҙагәрҙәрҙе еңеп сыға, гәҙелһеҙлек, бурлыҡ фашлана, хаҡлыҡ тантана итә.

«Кооператорҙар» повесында ошо сюжет һыҙығы тормоштағыса тәбиғи һәм мауыҡтырғыс, хатта ки ҡайһы бер ситуацыялары детективҡа тартым мажаралы итеп хикәйә ителә, кеше характерҙары үҫештә, киҫкен хәл-ваҡиғалар аша асыла.

Йәштәрҙән комсомолец Шакир образы эштә уңғанлығы, гәҙеллек

өсөн фиҙәҡәр күрәше, донъяға аңлы ҡарашы, яңылыҡҡа ынтылышы менән хәтерҙә ҡала. Кешеләр менән ягымлы мөгәмәләһе, ҡайнар мөхәббәте, принципиаллеге менән дә һоҡландыра ул. Уның фекерҙәштәре һәм ярҙамсылары Әптерәш, һөйгән ҡыҙы Зөһрә шулай уҡ үҙ замананының алдынғы йәштәре булып алға баҫа. Киләсәк — ошондай йәштәр ҡулында. Ауылдың йәшелсә баҡсаһы менән етәкселек иткән Зөһрә илдең киләсәген дә ҙур баҡсалай матур һәм мул емешле итеп күрергә хыяллана. Автор үҙе Зөһрәгә һоҡланып, уны Ғәзиз кулак ҡыҙы Фатима менән сағыштырып ҡарай, уға бар йәһәттән ҡапма-ҡаршы ҡуя: «Ул үҙенең матурлығы менән дә, аңфекере менән дә кулак ҡыҙы Фатиманан күп тапҡыр алда тора, — ти ул. — Уға һәр бер егеттең күҙе төшә, уны яраталар. Уға һәр береһе яҡын булырға тырыша. Уны егеттәр генә түгел, хатта ауылдың ҡыҙҙары, ҡатындары ла ярата, үҙҙәренең иң яҡын бер аңлы иптәше иттереп һанай».

Повеста үҙәктә торған Ғәзиз бай, уның улы Шафиҡ, ҡыҙы Фатима, тирмән арендаторы Санька яңы йәмгиәткә ят, синфи дошман булғандары өсөн генә түгел, бәлки халыҡ иҫәбенә байығандары, һаман да ярлыларҙы алдап йәшәргә тырышыуҙары, төрлө мутлыҡтары, мәкерлектәре, түбән йәнле әҙәмдәр булыуҙары өсөн тиҫкәре типтар итеп кәүҙәләндерелгәндәр. Уларҙы конкрет ситуацияларҙа күрһәтеү тормоштағыса хәйләкәр, аҫтыртын әҙәмдәр икәнлеген тойорға, танырға ярҙам итә.

«Кооператорҙар» повесында Ғ. Хәйри образдарҙы һүрәтләй белеү, тел, стиль йәһәтенән дә билдәле бер уңыштарға өлгәшә. Ул инде хикәйәләрендәге шикелле геройҙары хаҡында үҙе һөйләп йәки иҫтәлектәр рәүешендә генә яҙып үтмәй, уларҙы конкрет хәл-ваҡиғалар, киҫкен ситуациялар эсендә күрһәтеү хәстәрлеген күрә. Фекерҙәр, идеялар бәрелешен аҫҡанда үткер-үткер диалогтарҙы оҫта файҙалана. Фекерҙәрен асығыраҡ итеп еткерер өсөн ҡайсаҡ публицистик алымдарҙы, үҙ исеменән раҫлап ҡуйыу сараларын да ҡуллана. Повеста инде сюжеттың экспозиция менән башланышы, хәл-ваҡиғаларҙың ҡуйырыуы һәм кульминацияға етеп сиселеше лә эҙмә-эҙлекле булып ярылып ята. Персонаждарҙы уй-кисерештәр эсендә һүрәтләү йәһәтенән дә алға китештәр бар. Яҙыусының тасуир теле матурая, хикәйәләү, һүрәтләү стиле байыға һәм шымара бара. Юмор, сатира сараларын да йәтеш ҡушып ебәрә.

**«Ҡатын», «Мәхфүзә» повестары.** Был повестарын Ғәйнан Хәйри утыҙынсы йылдарҙа яҙған. Уларҙа «Кооператорҙар» повесында сағылған ҡайһы бер мотивтар артабан үҫтерелә: ауыл халҡының коллектив хужалыҡтарға — колхоздарға берләшеүе, алдынғы йәштәрҙең урындағы төп көстәргә әүерелеүе. Йәнә утыҙынсы йылдар башында синфи көрәштең характеры үҙгәргәне лә бик асыҡ күренә.

Шуныһы үҙенсәлекле, әҫәрҙәрҙең исеменән үк аңлашылыуынса, был повестарҙың үҙәгендә ҡатын-ҡыҙ образдары тора. Улар характер булараҡ тулы асыла. Яҙыусының әҙәби оҫталығы камиллаша.

Утыҙынсы йылдар башында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының образдарын һүрәтләгән бер нисә повесть, поэмалар яҙылды: Д. Юлтыйҙың «Айһылыу», Б. Ишемғолдоң «Трак-

торсы Айhылыу» поэмалары, Һ. Дәүләтшинаның «Айбикә», А. Таhировтың «Комсомол» повестары h. б. Уларҙа элек иҙелгән, йәберләнгән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының совет власы йылдарында нисек итеп аң-белемгә эйә булыуҙары, йәмгиәт эштәренә йәлөп ителеүҙәре, аңлы, алдынғы кешеләр булып үҫеп етеүҙәре hүрәтләнде.

**«Ҡатын»** повесындағы **Фатима** иhә тәүге биттәрҙән үк характеры формалашып еткән заманса алдынғы ҡатын-ҡыҙ булып алға баҫа. Фатима — йәмғиәт эштәрендә актив ҡатнашҡан, кослә ихтыярлы, үҙ мөхитенә күрә юғары мәҙәниәтле шәхес. Ул эштә лә, ғаиләлә лә, йәмғиәт тормошонда ла күптәргә өлгө булырлыҡ. Заманынса белеме, тәрбиәhе бар, белмәгән hөнәре юҡ тиерлек, кешеләр менән мөғәмәләhе hәйбәт. Үҙе матур, үҙе уңған. Эре лә, hауалы ла түгел, әҙәм рәтле кеше. Бер hүҙ менән әйткәндә, үҙенә hоҡланып туйғыhыҙ. Шуға уны яраталар ҙа, hәр йәhәттән үрнәк итәләр. «Фатима торған өй, уның уңғанлығы, тырышлығы, hәр бер ҡулға ингән тинде hаҡлыҡ касcahына йыйнап урынлы тотоуы арҡаhында, күңелле, йыйнаҡ, тамам бер мәҙәни күренеште алған; өйҙөң эсе таҙа, унан туҙан-саңды алтынға алыштырам, тиhәң дә табырға мөмкин түгел, — тип уҡыйбыҙ повестан. — Фатимаға эш менән йәки былай ғына килгән кешеләр, уны шаяртып бик йыш былай тиҙәр:

— Һин үҙең комсомол ағзаhы. Хәҙер инде бер аяғың менән партияға кустең. Үҙең hәр ваҡыт ярлылар яғын ҡайғыртаhың. Ә үҙең нисек йәшәйhең: элекке ваҡытта беҙҙең ауылда таш лавка тотҡан Мофтах байҙың ҡыҙҙарынан бер ҙә кәм түгелhең! Быны нисек аңларға кәрә[…] инде, Фатима иптәш?

Быйндай hүҙҙәргә Фатиманың яуа[…]бы бик ҡыҫҡа:

— Минеңсә, мәҙәни революция ваҡытында, бай булмайынса ла мәҙә[…]ни йәшәй белергә була. Униhы юҡ, быныhы юҡ, тип илағансы, булғанын яҡшылап файҙаланыу артыҡ... Минеңсә, тормошҡа ҡол булырғ[…] түгел, бәлки тормошто үҙеңә уңайл[…] юлға hалырға, шулай көйләргә кә[…]рәк. Беҙ тормоштоң яҡшылығынан оркмәйбеҙ». Бик фәhемле hүҙҙәр!

Шундай аҡыллы hүҙҙәре, йыйы[…]лыштарҙа яhаған матур докладтары, уңғанлығы, кешеләргә ярҙамсыл[…]лығы, дойом эш осон янып йәшәүе менән Фатима ысындан да өлгөлә[…] шәхес. Яҙыусы уны бер ни тиклем идеал образ кеүегерәк тә кәүҙәлән[…]дерә. Ул ауыл советы рәйесе итеп тә күрhәтелә. Тимәк, ул етәксе кеше лә.

Әммә ләкин яҙыусы Фатиманы нисек кенә идеаллаштырған hымаҡ тойолмаhын, ул яhалма матурландырылған образ да түгел. Тормошсан, бай натуралы, ҡайсаҡ ҡырҡараҡ ҡылыҡлы, тура hүҙле, гәҙел, күркәм йәш ҡатын ул. Хаталанған, әҙәмдәрҙе көнләштергән, хатта үсләндергән саҡтары ла юҡ түгел.

Ғ. Хәйри Фатиманың характерын hынамаҡ hәм ысынлап тороп асып бирмәк өсөн, повесының башынан алып аҙағынаса, уны гел киҫкен ситуацияларға эсенә ҡуя. Һаҡhыҙыраҡ ҡыланышы йә көткәндең киреhен эшләүе менән Фатима ҡайныhы Сөләймәндең дә асыуына тейгеләй, Сәлимәнең конләшеүенән әсе hүҙҙәр, мәсхәрәләр ишетә, ҡәйнәhе Голбиназ иhә, төрло ҡотҡоға бирелеп, киленен хатта ағыулап үлтермәк була.

Ләкин ниндәй генә киҫкен хәлдәрҙә лә Фатима ҡаушап ҡалмай.

Сәлимә үҙен әҙәмдәр алдында әсе һүҙҙәр менән мәсхәрәләп туҙынғанда ла тыныс тота. Көнсөл ҡатын түбәндәгесә төшөп әрләшмәй ҙә. «Көнләшеү — эшһеҙлектән тыуған бер ауырыу. Ундай ауырыуҙан ҡотолорға кәңәш бирәм, сөнки уның һуңы насар булыуы мөмкин. Бит береңә-береҙ ышанмай йәшәүҙең ниндәй ҡыҙығы бар? Шулай булғас, бер-береңә ышанырға, береңде-береҙ алдамаҫҡа кәрәк», — тип Сәлимәгә кәңәш хаты менән әҙәпле яуап биреүҙе ҡулай күрә.

«Ҡатын — ул һәр нәмәнән элек кеше. Ул — ирен башҡалар ҡойрогона йәбешеүҙән һаҡлау өсөн генә түгел, бәлки балаһы, гаиләһе, иле һәм шул илдә яңы тормош төҙөү өсөн көрәшеүсе лә булырға тейеш». Былар ҙа Фатима хаҡындағы һүҙҙәр. Былар Фатиманың үҙен дә шулай итеп тоторға һәм күрергә теләгән идеалы, шуларҙы тормошта ғәмәлгә ашыра барыуы ла.

Үҙен ағыулай яҙғас, ҡәйнәһенә ҡаты ғына тотоноп, уны ҡулға алдыртып ҡурҡытып алғас, Фатима енәйәтсел гәйепте кисерә лә белә. Сөнки ул ҡәйнәһенең үҙе ҡотҡо ҡорбаны икәнен яҡшы аңлай. Ә ысын енәйәтселәрҙе ул, әлбиттә, ярлыҡамай: ҡылған яуызлыҡтарына күрә хөкөмө.

Шулай итеп, «Ҡатын» повесында Фатима йөҙөндә алдынғы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының образы, тормош юлын, рухи үҫешен һөйләп сығыу менән түгел, бәлки асыҡланған характерҙы бер нисә ситуацияла тасуирлау ысулы менән асыла. Образ характерҙар бәрелеше, уй-фекерҙәр көрәше планында психологик яҡтан күберәк кәүҙәләндерелә. Был инде образды һүрәтләүҙең ҡатмарлыраҡ, нескәрәк ысулы — повеста синфи ҡаршылыҡтарҙы сағылдырыуҙа тышҡы көрәш рәүешендә түгел, ә эске көрәш — идея, мораль-әхлаҡ яҡтан еңеү формаһында бара.

Быларға бәйле рәүештә яҙыусының һүрәтләү саралары һәм ысулдары торләләнә: диалогтарҙың, хат формаһының, уртаҡ телмәр алымдарының роле көсәйә. Яҙыусы хәҙер үҙе аҙ һөйләй, күбеһенсә тасуирлай, уйфекерҙәргә иркенлек бирә.

**«Мәхфүзә»** повесында ҡала ҡыҙы **Мәхфүзә** образы төп фигура. Ул — педагогия техникумы студентҡаһы. Ҡала ҡыҙы булараҡ, Мәхфүзәнең белеме лә ҙурыраҡ, донъяға ҡарашы ла киңерәк. Совет мәктәбендә яңы заман рухында тәрбиәләнгән ҡыҙ. Уның йөҙөндә яҙыусы ҡала шарттарында үҫкән ҡыҙҙың ыңғай образын һүрәтләүҙе маҡсат итә.

Мәхфүзә иһә F. Хәйриҙең быға тиклемге ҡатын-ҡыҙ образдары менән сағыштырғанда рухы байыраҡ, күпкә ҡатмарлыраҡ натура. Ҡала ҡыҙы белемде лә тәрәнерәк үҙләштергән, әҙәбиәтте, сәнғәтте яҡшы белә. Донъя мәҙәниәте, замана ағышы, күптәрҙе уйландырған мәсьәләләр менән яҡшы хәбәрҙар. Ул уҡыууҡытыу эштәре, материалистик фәлсәфә, этика, эстетика, хатта модалар, мөхәббәт хаҡында бәхәсләшергә әүәҫ. Быларға бәйле рәүештә повеста фәлсәфә, сәйәсәт, яңы әҙәп-әхлаҡ, мөхәббәт, йәш кешенең тормоштағы урыны кеүек мәсьәләләр ҡалҡып сыға. Улар студенттарҙың, шул иҫәптән Мәхфүзәнең, донъяға ҡарашын һәм рухи донъяһын яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә.

Мәхфүзәнең һәр нәмәгә — сәйәсәткә, әҙәбиәткә, мәҙәниәткә, фәлсәфәләргә — үҙенсә ҡарашы бар. Ул төрлө идеологик һәм мәҙәни ағымдарға ла һуҡырҙарса эйәреп бармай,

барыһын аңларға, үҙенсә баһаларға тырыша. Мәҫәлән, йәштәштәре, төрлө студенттар кеүек егермense йылдар рухынса мөхәббәтте, модаларҙы мещанлыҡ ҡалдығы тип кире ҡағып та бармай, яңы тип һәр яңыға ла сат йәбешмәй. Кешеләргә, йәшлеккә хас тойғолар менән йәшәргә ынтыла.

Шулай итеп, Ғ. Хәйри Мәхфүзә аша алдынғы ҡарашлы тәрбиәле ҡала ҡыҙының, студент ҡыҙҙың өлгө булырҙай образын һынландырырға уйлай. Ул шулай уҡ идеаль образ түгел, тормошсан, бай натуралы характер. Характер буларак, уның үҙ мөхитендә, студенттар араһында, фекерҙәр көрәшендә бирелеше отошло.

Повеста Мәхфүзә характерын тулырак асышырға ярҙам итеүсе ике образ бар. Береһе үҙен яратып йөрөгән һабаҡташы — Сәгитйән, икенсеһе шундай уҡ һабаҡташы — Ҡотош. Улар өсөһө — өс төрлө характер, хатта бер-береһенә ҡапма-ҡаршы антиподтар. Сәгитйән — йомшағыраҡ тәбиғәтле, хыялланырға, хисәргә сумырға яратыусан егет. Мөхәббәте, тормош ҡаршыһында ҡаушап ҡалып, күңел төшонкөлөгөнә лә тиҙ бирешеп бара. Йомшаҡлығы, быуынһыҙлығы, яҡты идеалдарының юҡлығы уны һәләкәтенә илтә.

Ҡотош иһә Сәгитйәндең киреһе — ҡаты бәгерле әҙәм. Ҡотош өсөн тормош — үлемесле алыш. Заманы уға бары — синфи ягалаш, синфи яу. «Кем ҡаушай, ул ныҡ ҡыйнала, ә хәҙер замана шундай: тура килгәндә үҙең һуғып өлгөр, юҡһа үҙеңде иҙәләр, төшөндөңмө? — ти ул Сәгитйәнгә. — Әгәр ҙә үҙеңә ҡарата дошманлыҡ һиҙһәң, дуҫыңды, туғаныңды, хатта һөйгән йәреңде лә дөмбәҫләргә кәрәк! Шул ваҡытта ғына йәшәү хоҡуғына эйә булырға мөмкин». «Донъя — көслөнөкө», — ти ул. Тимәк, ул большевиктарса аяуһыҙ һәм килешмәүсән ҡанлы көрәш яҡлы. Илдең тыныс шарттарында ла ул шул принципты тотмаҡсы.

Ә тормош ҡаршылыҡтары ҡаршыһында ебеп төшкән Сәгитйән, киреһенсә, көрәшһеҙ-ниһеҙ үҙен-үҙе ҡорбан итергә әҙер. «Бына хәҙер мин үҙемде ниңәлер хәшәрәттәрҙең береһе — саянга оҡшатам, — тип яҙа ул көндәлегендә. — Саян, әгәр ҙә үҙенең дошманын еңеүгә ышанмаһа, үҙен-үҙе сага, үҙенең ҡойроғондағы ағыуҙы түбәһенә батыра... Мин саяндан кәм түгел». Шулай үҙ-үҙенә ҡул һала ул.

Ғәйнан Хәйри был повесында йомоҡ, йомшаҡ характерҙарҙы фекер ағышында тәнҡит итеүе менән бергә рәхимһеҙ синфи көрәш, персонаждары әйткәнсә, ботә нәмәгә синфи күҙлектән ҡараүҙы тәнҡитләгәне һиҙелә. Был яҙыусының донъяға ҡарашы һәм ижады эволюцияһында мөһим күренеш.

«Мәхфүзә» повесы — (ул яңы баҫмаларҙа «Өсәүҙең тарихы» исеме менән дә йөрөй) Ғ. Хәйриҙең йәштәр характерының төрлө типтарын күрһәтергә ынтылышы, образдарҙы башлыса психологик планда һүрәтләүе менән дә етди алға китеү. Был повесында ул көндәлек ысулын уңышлы ҡуллана. Повесть, асылда, Сәгитйәндең көндәлеге рәүешендә яҙылған. Көндәлек йәштәр исеменән авторға иркенләп фекер йөрөтөргә, төрлө уй-фекерҙәр ағымына иркен юл асҡан.

**«Боролош» романы. Романдың яҙылыу тарихы.** Ғәйнан Хәйриҙең берҙән-бер «Боролош» романының, ғөмүмән, башҡорт совет әҙәбиәтендәге тәүге романдың, яҙылыу һәм

баҫылып сығыу тарихы оҙон һәм ҡатмарлы ғына.

Романдың яҙылыу датаһы — 1925—1928 йылдар. Йәғни ул дүрт йыл эсендә яҙылған. Тимәк, Ғ. Хәйри матбуғатта күренә башлаған йылында уҡ роман яҙыу хыялы менән йәшәгән һәм шул эшкә тотонған. Башта ул романын «Яҙғы ташҡындар» тип атаған булған. Йәмғиәттәге боролош, революция ташҡындарын аңлатҡан. 1927 йылды яҙған автобиографияһында Ғ. Хәйри «Хәҙерге мәлдә «Боролош» исемле революцион роман өҫтөндә эшләйем», ти.

«Боролош» романын яҙыу Ғ. Хәйри ижадының күтәрелеш осорона тура килә. Бер үк ваҡытта шиғырҙар, поэмалар, хикәйәләр, повестар яҙа, журналистика олкәһендә эшләй. Шулай ҙа был ҙур күләмле роман сағыштырмаса тиҙ арала — дүрт йыл эсендә — яҙылып бөтә. 1928 йылдың 2 декабрендә «Башҡортостан» гәзите анкетаһына биргән яуабында «30 табаҡтар самаһы булған «Боролош» романын яҙып бөтөрҙөм», тип белдерә. Шул уҡ йылдың 15 декабрендә «Яңы ауыл» гәзитендә романдың беренсе бүлеге баҫылып сыға.

Ләкин роман тамамланды тигәндә лә яҙыусы уны камиллаштырыуҙы дауам итә. Уны тоҙәтеү, телен, стилен шымартыу менән шөғөлләнә. Тағы бер нисә яңы бүлектәр өҫтәй. Унан ҡулъяҙманы тулыландырып, төҙәтеп, аҡҡа күсереп сыға. 1929 йылдың мартында уны китап итеп сығарырға Башҡортостан дәүләт нәшриәтенә тапшыра.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, оҙаҡламай Ғ. Хәйриҙе, «Үҫеү» тигән ижади ойошма ойошторооуҙа нахаҡҡа гәйепләп, әҙәбиәттән ситләтәләр, романы ла баҫылмай туктатып ҡалдырыла. «Үҫеү»ҙән һуң уҙған бер нисә йыл ми-



20—30-сы йылдарҙа Башҡортостан дәүләт нәшриәтендә донъя күргән китаптар. Ғ. Хәйриҙең «Боролош» романы 1932 йылда сығырға тейеш булған

не эшләмәй торған, яһалма рәүештә онотолған тирмән хәлендә йәшәргә мәжбүр итте», — ти автор үҙе. Аҙаҡ үпкә сире көсәйә, һәм ул вафат була.

Роман ҡулъяҙмаһы ҡырҡ йылға яҡын яҙыусы архивында ятҡас, онотолоп бөттө тигәндә табылып, 1967 йылда китап итеп баҫып сығарыла.

Йәмәгәтселек романды яратып ҡаршы ала. 1979 йылда уның икенсе баҫмаһы донъя күрә, урыҫ теленә тәржемә итеп сығарыла. Күп ваҡыттар үтеүгә ҡарамаҫтан, роман әле лә уҡыусы иғтибарына лайыҡ.

**Романдың проблематикаһы.** «Боролош» романы ни яҡтары менән яңы һәм актуаль һуң? Беренсенән, «Боролош» үҙ ваҡытында донъя күрә алмаған хәлдә лә, башҡорт совет әҙәбиәтендәге тәүге роман булыуы менән яңы һәм әһәмиәтле. Икенсенән, роман әҙәбиәтебеҙҙә беренселәрҙән булып заманаһының мөһим проблемаларын күтәрә һәм уларҙы киң даирәлә художество йәһәтенән шаҡтай уңышлы хәл итә. Бигерәк тә егерменсе йылдарҙың тәүге яртыһындағы социаль-тарихи ваҡиғалар, нәп осоро бөтә үткерлеге һәм ҡатмарлығы менән ҡыйыу яҡтыртыла. Яҙыусы революция йылдарын да, унан һуңғы дәүерҙәрҙе лә еңеүҙәрҙән еңеүҙәргә олғашеу рәүешендә генә һүрәтләмәй, тарихтағыса бар ҡаршылыҡтарҙы, еңеүҙәр менән ҡатар еңелеүҙәр, хаталар булыуын да асып һала.

Роман буйынса ҙур революцион ваҡиғаларҙың тарихи-иҗтимағи әһәмиәте менән бергә сәйәси, иҡтисади, мораль-этик яҡтары ла айырылмаҫ берлектә һүрәтләнгәне күренә. Революцион ваҡиғалар Ғәйнан Хәйри тасуирлауында тарихтағы боролош ҡына түгел, тормошҡа, көнкүрешкә, кешеләрҙең рухи донъяһына ла шунса косло йоғонто яһаған боролошло хәлдәр ул. Улар, үҙ нәүбәтендә, романдың социаль-сәйәси, иҡтисади, мораль-этик проблематикаһын үҙәкләштерә. Халыҡ хужалығының торошо, хәл-ваҡиғаларҙың тиҙ йәки аҡрын үҙгәреше, кеше яҙмыштарының боролошо, социаль ҡатламдарҙың, синыфтарҙың хәле революцияға ҡарата мөнәсәбәттә сағылдырыла. Яҙыусы үҙе теләгәнме-теләмәгәнме, революцияның ыңғай яҡтары ғына түгел, уның кире яҡтары ла — емереү-ҡыйратыуы, элекке тәртиптәрҙе, әхлаҡ нигеҙҙәрен боҙоуы ла — объектив рәүештә сағылыш таба.

Роман үҙ эсенә Беренсе донъя һуғышы башланырҙан алып егерменсе йылдар уртаһына тиклемге ун-ун бер йылғы осорҙо ала. Улар, билдәле булыуынса, социаль-тарихи ваҡиғаларға гәжәп бай осор: Беренсе донъя һуғышы, Февраль һәм Октябрь революциялары, граждандар һуғышы, илдә халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, нәп йылдары. Ҡатмарлы боролошло осор. Әҫәрҙә алынған геройҙар ошо ҙур ваҡиғалар эсендә асыла, күптәре көрәштә сыныға, еңә, бәгзеләре еңелә. Күптәр шулай ут-дауылдар аша оло һынауҙар үтә. Яңы замандың яңы кешеләре тыуа, үҫә; иҫке заман, элекке йәмғиәт менән ҡайһы бер социаль ҡатламдар, синыфтар бөлә, бөтә. Яңы йәмғиәт үҙенә үтә ауырлыҡ менән юл яра. Шулай төрло булмышлы кешеләрҙең яҙмыштары үҙгәрә. Шулай кешеләрҙең төрлө яҙмыштары аша Ғ. Хәйри үҙ романында XX быуаттың тәүге сирегенең ун йылындағы тарихи, сәйәси, иҡтисади, мораль-этик проблемаларҙы художестволы тикшереүҙе маҡсат итә.

**Образдар системаһы.** Авторы тарафынан революцион роман тип иҫәпләнгән «Боролош» романының геройҙары, совет әҙәбиәтенә хас булғанса, синфи көҙлектән һәм социалистик әхлаҡ принциптарынан сығып һүрәтләнгән. Ундағы образдар системаһы асылда, социаль, синфи яҡтан бер-береһенә ҡапма-ҡаршы

ике ҙур төркөмгә айырыла. Бер төркөмө — эксплуататорҙар, иҙеүсе синыфтар; икенсеһе — улар тарафынан иҙелеүселәр, ярлы крәҫтиәндәр, эшселәр. Романда тәүгеһенә Ғариф бай, Мирза мулла, Исламов тирмәнсе, Исмәғил сауҙагәр, Камали ише синфи дошман образдары инһә, икенсеһенә Шәмси, Баһау, Ғәли, Вахит, Сабира кеүек революцион йәштәр, бер нисә крәҫтиән, эшселәр синыфы вәкилдәре образдары ҡарай. Тәүгеләре әле шул синфилыҡ принциптарынан сығып, торғаны бер тиҫкәре характерлы кире образдар итеп һүрәтләнһә, икенселәре иҫке капиталистик йәмғиәтте емереп, яңыны, социализм йәмғиәтен төҙөүсе, киләсәктәре яҡты булған ыңғай образдар рәүешендә һынландырыла. Яҙыусы был образдарҙы йәмғиәт тормошонда нисек булырға тейешлеге рәүешендә кәүҙәләндерергә тырыша.

Ләкин яҙыусының бөтә образдары ла бындай тар социаль-синфи схемаға һис һыйып бөтмәй. Уларҙың байтағы, тормоштағыса йәнле характер булараҡ, холоҡ-ҡылығындағы, тормош юлындағы ыңғай һәм кире яҡтары менән асыла, теремек кеше, шәхес булып күҙ алдына баҫа. Шулай автор үҙе ҡорған схемаларҙы, совет әҙәбиәтенән талап ителгән бер яҡлы принциптарҙы йыш ҡына емергеләп тә үтә, тормошсан образдар тыуҙырыуға олгәшә. Бигерәк тә Ғариф, Сәхибә, Ғәли, Солтан, Сабира образдары социаль тип булыуға ҡарағанда характер, шәхес булараҡ тулы кәүҙәләндерелә.

Һәр хәлдә, «Боролош» романының образдар системаһында совет әҙәбиәтенә хас бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ике синфи типтар төркөмө айырым-асыҡ булһа ла, был схемаға ғына һыймай, ҡатмарлы шәхес, тулы характер булып үҫкән образдар күберәк.

Йәнә совет әҙәбиәтендә, Мәжит Ғафуриҙың бер хикәйәһе исеме менән әйткәндә, «элек ҡыйын ине, хәҙер анһат ул», тигән шикелле, Октябрь революцияһына тиклемге тормошто, капиталистик йәмғиәтте насар, ауыр, михнәтле ине тип, ә революциянан һуңғы тормошто, совет власын, социалистик йәмғиәтте яҡшы, еңел, бәхетле итеп һүрәтләү киң таралғайны. Ләкин тормоштоң ауырлығы йә еңеллеге революцияларҙан, кешенең бәхете йә бәхетһеҙлеге йәмғиәт үҙгәрештәренән генә тормай икәнлеге лә асыҡланды. Тимәк, «элек ҡыйын ине, хәҙер анһат ул» тигән схема ла тормош дөрөҫлөгөнә, йәмғиәт үҫешенә һис тә генә тура килеп тормай. Тормош ул, элекме, хәҙерме барыбер, һис бер ниндәй схемаға һыймай. Схема үҙе әҙәбиәт өсөн ят.

Ошо хәҡиҡәтте «Боролош» романы ярайһы уҡ раҫлай. Автор тормош ваҡиғаларын, кешеләр яҙмышын шул әҙер схемаларға һалып ҡарай, быны менән ул ныҡ ҡына оттора, әммә һөйләр хәл-ваҡиғалары, геройҙары был ҡыҫаларға һыймай, уны йыш ҡына аша атлап уҙа. Былар ҙа үҙенсә бер һабаҡ. Тормош һабағы, ижад һабағы.

**Ғариф образы.** Ғариф бай йөҙөндә автор элекке башҡорт байҙарының береһен, йәғни сәйәси атамаһы менән әйткәндә, милли буржуа синыфының типик вәкилен кәүҙәләндереүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Ғариф — башҡорт ауылдарының эре генә байы. Күп кенә дисәтинә ер биләй, ишле мал аҫрай, умарталар тота, сауҙа эше менән шөғөлләнә, туғын мастерскойы асып ебәрә. Һәр хәлдә, капитализм шарттарында тер-

лә кәсептәр менән шөгөлләнеп иркен генә йәшәгән бай кеше, заманаһының уңған тырыш эшҡыуары. Ул башҡорт йәмгиәт көнкүрешенең ҡанун, йолаларын һаҡларға, ауыл халҡы менән һәйбәт мөгәмәләлә булырға, туған-тыумасалыҡ тәртип-низамдарын тоторға тырыша. Уны артыҡ һаран, серегән бай тип тә булмай. Заманына күрә уҡымышлы, динле кеше. Ауылда, тирә-яҡта абруйы бар, түрә-ҡаралар араһында эшнәләре күп. Тормоштоң ҡайҙа табан ағышын, сәйәсәттең үҙгәрешен сос тойоп, заманаһына яйлашып йәшәй белә. Улы быны кинәйәләп былай ти: «Беҙҙең атайҙың йыры йыл һайын алмашынып тора. Ул һиңә былтыр «Ашҡаҙар»ҙы йырлаһа, бөгөн «Ни ҡылырһың, Хажи ағам, тотһа Мәскәүҙәр ағанды» йырлай... Былтыр ҡөрьән уҡыған кеше шат була, ҡөрьән уҡығыҙ! тиһә, быйыл милли яҙыусыларыбыҙҙы уҡығыҙ, үрнәк итегеҙ! ти».

Февраль революцияһынан һуң, Ғариф башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәте яғына баҫа, Башҡорт хөкүмәтен яҡлап ҡулына ҡорал ала, отрядтар төҙөй. Граждандар һуғышының утялҡындарынан да, ни мөғжизә менәндер, иҫән-һау сыға ул. Тыуған ауылына әйләнеп ҡайтып, үҙ ҡулы менән йәнә донъяһын торғоҙорға тотона, нэп йылдарында инде тағы етеш кенә тормошло бай кешегә әйләнә.

Йәмгиәт тормошоноң төрлө шарттарында, төрлө синфи ҡатламдар менән уртаҡ тел табыуына, хатта эшнә була алыуына аптыраған улына Ғариф: «Улым, тормошто бер төрлө генә аңларға ярамай... Йөҙ һум аҡсаң булғансы йөҙ дуҫың булһын, һәр нәмәнең уң яғына ғына ҡарарға ярамай, кире яғын да күрә белергә кәрәк», — тип яуап бирә. Был уның үҙенсә тормош фәлсәфәһе лә.

Ғариф капитализм шарттарында бай булған, революциянан һуң шул байлыҡтарынан яҙған, аҙаҡ тағы донъяһын ҡороп бөтәйтеп алып киткән, әҙәрләүҙәргә, һөргөндәргә юлыҡҡан зат, ҡатмарлы яҙмышлы шәхес. Хатта ки ярым трагик фигура. Уның яҙмышында айырым шәхестәрҙең генә түгел, бик күп ғаиләләрҙең, юғары синыфтың фажиғәләре сағыла.

Революция йәмгиәтте, синыфтарҙы ғына түгел, хатта кешеләрҙе бербереһенән айырҙы, ата-улды, туғантыумасаларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйҙы. Революцияның ҡанлы тәгәрмәсе абайламай, аямай-нитмәй күп нәмәләрҙе, яҙмыштарҙы, ғүмерҙәрҙе иҙеп үтте.

Шулар хаҡында үртәнеп, Ғариф бына нимә ти: «Бына ғаилә... Бына минең ғаиләм... Бер ғаиләлә нисә төрлө ҡараш, бер ғаиләлә нисә төрлө юл, нисә төрлө фекер... Тимәк, шулай булғас, киң бер илдә нимәләр булмаҫҡа мөмкин? Хәҙер кемде кем таный? Кемгә кем ҡәрҙәш? Ҡайҙа кешенең хисе? Юҡ, береһе лә юҡ...»

Геройының был ҡараштарына ҡушылғандай, автор үҙенсә ҡәтғи һығымтаға килгәндәй итә: «Һәм, ысынлап та, хәҙер һәр кем синфи хис нәтижәһендә ҡанға һыуһаған, һәр кем ҡанлы сәйәсәт яһай».

Шул ерлектә яҙыусы Ғариф бай менән улы Ғәлиҙе бер-береһенә ҡан дошманы итеп күрһәтә. Бер яуҙа Ғәли командир ҡулына дошман атаһы килеп эләгә, әсир алына. Ярлыҡау йә ҡаты хөкөм Ғәли иркендә. Ғәли атаһын үҙе атырға ҡарар итә. «Ғәли наганды ҡыҫҡан ҡулының бармағын курокка яҡынайтҡас, Ғариф, ялбарыулы тауыш менән:

— Ғәли, улым, һин ни эшләйһең? Аҡылыңдан яҙҙыңмы әллә?! — тип үтенде. — Бит, мин һинең атайың, һинең атайың — Ға-ри-ф...

— Эйе, мин һинең улың Ғәли, — тине ул һәм наганының курогын тартты».

Үҙ атаһын һис йәлләп тормай атҡан улы Ғәли менән булған хәл ҡыҙылдарҙың, яңы тигән кешеләрҙең, ни тиклем шәфҡәтһеҙ, ҡанһыҙ икәнен дә күрһәтә. Революцияның ҡанға һыуһағанын, ҡанлы сәйәсәт икәнен тағы бер ҡат таныта.

Революцион репрессив әхлаҡ менән быуаттар буйы килгән халыҡсан әхлаҡ ҡағиҙәләре һис ярашмай.

Синфи күҙлектән ҡарап, Ғ. Хәйри Ғариф бай образын кирегә бөткән социаль тип, синфи дошман кеше итеп кәүҙәләндерергә тырыша. Ә Ғариф бай үҙе бай натураһы, уңғанлығы, аҡлылығы, ҙур тормош тәжрибәһе логикаһы буйынса ҡатмарлы, әммә күп йәһәттән ыңғай характерлы образ булып һынлана. Автор төҙөгән синфи ҡоршауҙың сатнау ғына түгел, һынып сыҡҡанлығы әллә ҡайҙан күренеп тора. Образ логикаһы үҙенекен итә. Ғариф бай образының ғибрәтле һәм һабаҡ бирер яғы шунда.

**Революцион рухлы йәштәр образы.** Романдың төп ыңғай геройҙары булып Шәмси, Ғәли, Вахит кеүек революцион рухлы йәштәр образдары тора. Улар аша яҙыусы яңы йәмғиәттең яңы йәш кешеләренең нисек үҫеүен, эш-шөғөлдәрен, характерҙарын күрһәтергә теләй. Уларҙың үҫеү, сынығыу юлдарын тулыраҡ сағылдырырға тырыша.

Шәмси — үҙәк образ. Ул, бала сағынан етем ҡалып, революцияға тиклемге тормоштоң әсеһен күп татыған, Ғариф байҙа хеҙмәтсе хәлендә үҫкән йәш кеше. Күп ыҙа-яфалар күреү, байға хеҙмәт итеү кеше косө менән байығандарға, иҙеүселәргә ҡарата күралмау, нәфрәт тойғоһон уята. Революция Шәмсиҙең күҙен аса, синфи аң тәрбиәләй. Ул шулай совет власы, яңы, социалистик йәмғиәт, яңыса тормош өсөн көрәшсе булып китә. Шәмсиҙә революцион рух тәрбиәләүҙә яҡташы, большевик Баһау Нуриманов ҙур роль уйнай. Яу, көрәштәр ҡосағында формалаша Шәмси характеры.

Ғәйнан Хәйри тасуирлауынса, Шәмси — яңы йәмғиәт төҙөү эшенә йәне-тәне менән бирелгән фиҙаҡәр, большевистик рухлы, ҡоростай ныҡлы, аҡлы көрәшсе. Уның төп девизы — көрәш. Көрәштән тыш ул тормошто, йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмай. Көрәш батыр булыуҙы талап итә. Шәмси кешене лә фәҡәт көрәшсе ҡарашынан сығып баһалай. «Әгәр ҙә һин һоралған батырлыҡты бирә алмаһаң, кеше түгелһең, — ти ул. — Шулай уҡ, һәр бер ҡурҡыныс эсенә инмәһәң, көрәш ҡосағына ла атылмаһаң, кеше түгелһең. Сөнки тормош көрәшле булғанда ғына ләззәтле».

Егерменсе йылдар совет әҙәбиәтендә революцион рухлы, фиҙаҡәр большевиктарҙы ҡоростай кешеләр итеп тасуирлау хас булғанса, Ғ. Хәйриҙең Шәмсие лә ҡорос кешеләр, тимер кешеләр кеүегерәк. Автор үҙе лә романда ундайҙарҙы «ҡорос кешеләр», «тимер кешеләр» тип атай.

Ғариф байҙың улы, Шәмси менән бергә үҫкән, бер рухта тәрбиәләнгән Ғәли ҙә, яңы заман кешеһе. Ғәли үҙенең синфи аңы үҫешендә Шәмсиҙең ҙур ролен күрә. Эшселәр араһында заводта, шахталарҙа эшләүсе Ғәлиҙе синфи ҡарашлы, аҡлы көрәшсе итеп үҫтерә. Коммунистар партияһы са-

фында бөйөк боролош юлдарын үтә. Ләкин нэп йылдарында һәм һуңыраҡ та яңылыҡтың ҙур ауырлыҡтар менән юл ярыуы, сөңиалистик йәмғиәтте төҙөүҙә еңеүҙәргә ҡарағанда еңелеүҙәрҙең күп булыуы ҡаршыһында Ғәли аҙабыраҡ та ҡала. Нэпты шул капитализмға кире ҡайтыу тип ҡарай, соңиализм төҙөйбоҙ икән, тип йорөүен алданыуға һанай башлай, идеалдары емерелеүенә үкенес белдерә. Идея хаталары өсөн партиянан сығарыла.

Шул замандарҙағы сәйәсәткә, тормошҡа мөнәсәбәттә Шәмси менән Ғәлиҙең бәхәсләшкәне, фекер айырымлыҡтары айырым иғтибарға лайыҡ.

«Ғәли, эшләгән кешелә хата була, — тип һөйләп алып китте Шәмси, — хаталар бары эшләмәгән кешелә генә булмай. Ә инде һинең, беҙҙең иҫкегә табан, асығыраҡ әйткәндә, соңиализмға түгел, шул уҡ капитализмға боролош яһауыбыҙҙан ҡурҡыуың — был күләгәнән өркөүең генә...» Быға ҡаршы Ғәли: «...мин көрәшеп алған төрмош мине алданы. Ә инде башҡа тормош өсон үҙемдең идеалымды алдарға, уға ярарға тырышырға минең көсөм етмәй. Көс булған тәҡдирҙә лә, минең выжданым уны күтәрмәй», — ти.

«...Иҫкенән хәҙерге тормошҡа күскән күп кешеләр һуңғы утлы тормошта плитага һалынған боҙ шикелле ирейҙәр, юғалалар, — тип дауам итә бәхәсен Шәмси. — Был тормошта дәүерҙең үҙ талабы менән тыуған ҡорос кешеләр генә йәшәй алалар. Ә инде һиңә килгәндә, һин дәүерҙең үҙ талабы менән тыуғанһың...»

«— Шәмси, был — тормош... Унда барыһы ла булырға мөмкин. Ә хәҙергә кеше менән тормош ҡына түгел, хатта кеше менән кеше уйнай ала. Бына һин, дуҫым, сәтләүек ашайһың. Төшөн эләктерәһең дә ҡабығын ергә, үҙеңдең аяғың аҫтына, һалып тапайһың... Тормош та кеше менән шулай уйнай. Ул һинән уға кәрәкле булған бөтә нәмәне үҙенә ала ла һуңынан, сәтләүек ҡабығы шикелле, һинең үҙеңде урамға ташлай...

— О, был — йырланған фәлсәфә...

— Ашыҡма, дуҫ!.. Әле соңиализмға алыҫ, сөнки уға яҡынайғас, кире, ҡайҙан сыҡһаҡ, шунда боролондо.

Шәмси ҡырҡыу тауыш менән:

— Хата, хата... Беҙ донъяны большевик ҡулы менән йүгәнләйбеҙ!»

Был бәхәс ҡорө фәлсәфә генә түгел, сәйәси бәхәс. Дөнъяға, йәмғиәт тормошона ике төрлө ҡараш.

Был бәхәс хәҙерге көндә лә бик заманса яңғырай. Большевик Шәмсиҙең ҡараштарына ҡарағанда Ғәлиҙеке хаҡлыраҡ икәнен тарих раҫлай.

Бына тағы Шәмсиҙең болыпевистик ҡәтғи бер ҡарашы: «Ҡамасаулаған бөтә нәмәне, бик ҡиммәтле булһа ла, ҡорбан итмәйенсә, кеше үҙенең теләгенә, үҙенең маҡсатына ирешә алмай. Шулай булғас, мөмкип булған бөтә нәмәне ҡорбан итергә кәрәк. Ә беҙҙең тормошта, беҙҙең быуатта момкин булмаған бер нәмә лә юҡ!» — ти ул.

Ләкин маҡсат өсөн бөтә нәмәне ҡорбан итергә мөмкин, донъяла большевиктар ала алмаҫлыҡ ҡәлғәләр юҡ, тиғән большевистик ҡараштарҙы ла тарих инҡар итте.

Йомғаҡлап әйткәндә, романда һүрәтләнгән революцион рухлы йәштәр образдарынан Шәмси коммунистик идеалдарға тоғро, фиҙаҡәр йәш большевик образын һынландырһа, Ғәли образында тормошҡа айығыраҡ ҡараған, большевиктар тәғлимәтенә йәбешеп ятмаған йәш кешенең ха-

рактеры сағыла. Шәмсиҙең идея уҡытыусыһы Баһау Нуриманов та шәкерте һымаҡ ярым идеаллаштырылған образ.

Революцион рухлы йәштәрҙән Вахит, Солтан ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы шәхестәр, төрлө характерҙар итеп кәүҙәләндерелеүҙәре менән отошло һәм тормошсандар.

**Ҡатын-ҡыҙ образдары.** Романда төрлө яҙмышлы һәм төрлө характерлы ҡатын-ҡыҙ образдары байтаҡ.

Ғәйнан Хәйри, бер яҡтан, Шәһиҙә, Сәхибә, Сабира образдары аша революцияға тиклем ҡатын-ҡыҙ яҙмышының ауыр һәм фажиғәле икәнен һүрәтләй. Был йәһәттән ул элек Риза Фәхретдинов, Мәжит Ғафури, Афзал Таһиров, Дауыт Юлтый әҫәрҙәрендә күтәрелгән ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы мәсьәләһен үҙенсә яҡтыртыуҙы дауам итә.

Ире Беренсе донъя һуғышына китеп, йәш бала менән ҡалған Шәһиҙәнең яҙмышы үтә фажиғәле. Сабыйы менән уны Ғариф бай өйөнән ҡыуып сығара. Ул теләһә ҡайҙа ҡунып, хәйер һорашып тамаҡ туйҙырырға, йән аҫрарға мәжбүр. Шәһиҙә яҙмышы аша ярлы кешеләрҙең эт көнөндәге хәлдәре тасуирлана.

Йәш, эшкә уңған, сибәр Сәхибә, Сабира кеүек ҡыҙҙарҙың тормоштары, килер көндәре иһә өмөтлө түгел. Яратышып кейәүгә сығырға әҙерләнгән был һылыуҙарҙы иҫке замандың яман гөрөф-ғәҙәттәре, хөрәфәттәре арҡаһында бәхетһеҙлек һағалай. Сәхибә менән Мәхмүттең саф мөхәббәтен, һөйөшөп ҡауышырға йыйыныуҙарын, Мәжит Ғафуриҙың «Ҡара йөҙҙәр» повесындағы Ғәлимә менән Закир яҙмышы кеүек, фажиғә көтә. Уларҙы ла байғуралар, фанатик кешеләр урамда мәсхәрә итеп йөрөтәләр, Мәхмүтте үлтергәнсе туҡмайҙар. Сәхибә тыуған ауылын ташлап сығып китергә мәжбүр була, унан яман кешеләр ҡулына барып эләгә.

Сабира менән Әхмәттең яҙмышҡылары ла никахһыҙ сабыйҙары өсөн ҡот осҡос фажиғәгә әйләнә. Донъяның ҡотон боҙа тигән алама хөрәфәт сабыйҙы ҡорбан итә.

Солтан менән Нюраның мөхәббәттәре лә төрлө дин, төрлө милләт кәртәләре арҡаһында емерелә һәм фажиғә менән бөтә.

Ауыр яҙмышлы Шәһиҙә менән Йыһан да, Сәхибә менән Сабира ла, Нюра ла, Ғәлимәләй, иҫке заман ҡорбандары.

Сабира, ярай, революциянан һуң үҙ тырышлығы менән донъяһын йүнәтеп, совет-партия мәктәбендә уҡып йәмәғәт эшмәкәре, совхоз директоры булып китә — бәхетле яҙмышҡа юлыға. Сәхибә иһә, Ғариф байҙың бисәһе булып, бай тормошҡа сумған кеүек булһа ла, бәхетен, донъяла үҙ урынын таба алмай. Иҫке тормош уны мәсхәрәләп, күңелен һындырған, намыҫын тапап үткән була, уй-күңелендә яуызлыҡҡа яуызлыҡ ойлай.

Ғәйнан Хәйри үҙ романында ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышына бәйләп, саф мөхәббәт, ирекле һөйөү, яңыса әхлаҡ мәсьәләләрен дә күтәрә. Ул, мәҫәлән, Шәмси менән Зөләйха мөхәббәте, татыу ғаилә ҡороуҙары миҫалында ысын саф мөхәббәт, советса ғаилә үрнәген сағылдырырға теләй.

Егерменсе йылдарҙа яңы йәмғиәттә, йәштәр араһында мөхәббәткә, ғаилә ҡороуға төрлө ҡараштар йәшәй. Ҡуптәре ир менән ҡатындың тигеҙлегеи хуплай, бәгзеләре ирекле мөхәббәтте яҡлай. Ҡайһы бер ирегеттәр ҡарашынса, ҡатын-ҡыҙ тормошта, ғаилә эсендә ҡурсаҡ хәлендә

булырға тейеш. Ирекле мөхәббәт, тигән нәмәнең нимәгә килтерәсәге Ғәли менән Һажәр ғаиләһендә асыҡ күренә. Ирекле мөхәббәт ғаиләне нығытмай, фәҡәт емерә генә. Элек гимназияла уҡыған, етеш тормошта иркен йәшәгән Һажәр бына ҡатын булыуға нисек ҡарай: «Мин — ҡатын, бары ҡатын, — ти ул. — Мин бирәүҙең кәйефе өсөн үҙенең тәнен, үҙенең матурлығын һатҡан ҡатындарҙың береһе... Минең бөтә бурысым — бары ҡатын булыуҙан ғына ғибәрәт». Ул һәр кемдең шәхси ирке, ирекле мөхәббәт, тип, ирле ҡатын көйө, бүтән ирҙәр менән дә мөнәсәбәттәргә инеүҙән һис тартынмай. Быға ҡарата ла уның үҙ «фәлсәфәһе» бар: «Бары ҡатын ғына булыу арҡаһында, матди яҡтан бөтөнләйе менән берәүгә, һиңә, бәйләнгән бәндә, — ти ул иренә. — Әгәр ҙә был мәсьәләлә мин һинән ҡәнәғәтләнмәйем икән, икенсе берәү менән мөнәсәбәттә булыуҙы бурысым итеп һанайым... Ире өсөн бары ҡатын ғына булған кешегә был нәмә гонаһ түгел».

Һәр хәлдә, Ғәли менән Һажәрҙең тарҡалыр ғаиләләре, Һажәрҙең һүҙҙәре, ҡылыҡтары аша Ғәйнан Хәйри йылдарҙа йәштәр араһында киң генә таралған ирекле мөхәббәт тигән ялған фәлсәфәне һәм боҙоҡ әхлаҡты фаш итә, ул арҡала йәки тормош ауырлығы сәбәпле килеп тыуған фәхишәлек күренештәрен фашлай.

Кешенең холоҡ-ҡылығы, тәрбиәһе лә аҙмышын билдәләшә. Ошо яҡтар ҙа ярайһы уҡ төҫмөрләнә романдың геройҙары аҙмышында.

**Тормош-көнкүрештең, йолаларҙың сағылышы.** «Боролош» романында, жанрға хас булғанса, һүрәтләнгән осорҙоң төрлө яғы — иҡтисади, сәйәси, социаль яҡтары, халыҡтың тормош-көнкүреше, йолалары киң сағылыш ала. Яҙыусы йәмғиәт тормошона Беренсе донъя һәм граждандар һуғыштары, Февраль һәм Октябрь революциялары, нәп осорҙары кеүек киҫкен боролошло социаль-тарихи ваҡиғалар йогонто яһауын ғына түгел, башҡорт халҡының XX быуат башындағы йәшәү рәүешен, быуаттар буйына нығынған гөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, көнкүрешен, уларҙың яңы тарихи шарттарҙа үҙгәрә, яңыра барыуын да ентекле тасуирлай. Ауылдың төрлө миҙгелдәге күренештәрен, тәбиғәтен матур тасуирлауҙары, йәйге эш, өмә, урман эше, туй, ҡунаҡ булышыу, йәштәрҙең киске уйыны тамашалары хәтерҙә ҡала. Эш, һөнәр тамашалары кешенең уңғанлығын, төрлө һөнәрҙәргә эйә булыуын күрергә ярҙам итһә, туй, мәжлес, уйын күренештәре кешенең рухи матурлығын, күңел күркен асырға ла булыша. Гүзәл тәбиғәт үҙе үк, йолалар, уйындар ауыл кешеһендә үҙенән-үҙе матурлыҡ, әҙәплелек, эстетик зауыҡ тойғоларын тәрбиәләй. Эшкә, һөнәргә өйрәнеүе менән кеше тормошто ҡороусы, һәйбәт йолаларҙы, гөрөф-ғәҙәттәрҙе тотоуы, туй-уйындар уртаһында булыуы менән үҙен, көнкүрешен йәмләүсе лә ул. Кеше шулай бәләкәй сағынан тәбиғәт ҡосағында үҫеп, ғаилә эсендә тәрбиәләнеп, кешеләр араһындағы яҡшылыҡтарҙы күреп, хикмәтле, аҡыллы һүҙҙәрҙе, кәңәштәрҙе ишетеп, хәҙерге термин менән әйткәндә, халыҡ педагогикаһын үҙләштерә. Бына ошондай яҡтарҙы, халыҡсан матур тамашаларҙы «Боролош» романында бик күп күрергә, фәһем итергә мөмкин.

Халыҡтың көнкүреше менән бергә тәбиғәттең үҙен тасуирлауға ла ҙур урын бирелә романда.

Автор үҙе әйтмешләй, тәбиғәт — кешенең күңел көҙгөһө ул. Матур тәбиғәт ҡосағында кешенең үҙенең дә матур булмауы мөмкин түгелдер.

Бына романда Агаркүлдең нисек тасуирланыуына ғына иғтибар итәйек: «Агаркүлдең урманлы-таулы яры — ҡояш байышы яғында. Киске ҡояш ағастар араһынан күл өҫтөнә ҡарап, буй-буй алтын таҫмалар һуҙа. Шул уҡ ваҡытта алтын таҫмалар йәнәшәһенән оҙон ағастарҙың күләгәләре лә һуҙыла. Күл өҫтө ҡайһы саҡта, әкрен ел менән, нәзәкәткә сумған йәш ҡыҙҙың өҫтөнә кейгән алтын буталлы ебәк күлдәге шикелле елберҙәп ҡуя. Йә булмаһа, үҙенең һөйәркәһен көткән ҡыҙ кеүек тынып ҡала, тағы ла сибәрләнә, мөхәббәт тулы күҙҙәре менән һиңә ҡарап, йылмайған, көлгән төҫлө тойола.

Яр башында күлде үҙенә көҙгө итеп ҡараған мөһабәт ағастарҙың ботаҡтарына ултырып һайраған ҡош тауыштары шул күлдә һыу сәсрәтеп йөҙгән ҡыҙҙарҙың көмөш тауыштарын хәтерләтәләр. Ҡарт ҡайын төбөндә... йәш егет гармун уйнай. Гармунға ҡоштар ҙа ҡушылған төҫлө һиҙелә... Ә тәрән күл, матур йәмле күл, уны шулай тын ғына тыңлай».

Был шиғри тасуирлауҙа тәбиғәт менән кеше бер-береһен матурлай төҫлө.

Романда тәбиғәт кешенең кәйефенә йә иһә хәл-ваҡиғалар үҙгәрешенә лә бер ишара булып тора. Ниндәйҙер ауыр хәлдәрҙе һөйләргә йыйынғанда тәбиғәттәге ҡырыҫ, болароҡ яҡтар, ҡыштың, көҙҙөң йонсоу көндәре тасуир ителеүсән.

Тормош, әлбиттә, ал да гөл генә түгел. Тормоштоң төрлө яҡтары, кеше ғүмере тураһында һөйләгәндә Ғ. Хәйри йыш ҡына фәлсәфәгә төшөп китергә лә ярата. «Тәбиғәттә һәр нәмә тыуымлы һәм үлемле, — ти ул. — Ләкин бер кешенең ҡылы өҙөлөү менән, тормош өҙөлмәй, сөнки тормош бер кешенән тормай. Тормош — күптәрҙән ойошҡан тереклек. Ул тереклектең иҫәпһеҙ ҡатлауында иҫәпһеҙ йырҙар йырлана. Сөнки ҡайҙа тормош, шунда көрәш».

Тәбиғәт һәм тормош. Улар бер-береһенән айырылғыһыҙ. Яҙыусы уларҙы йыш сағыштыра һәм бер бөтөн донъя итеп ҡарай. Тағы бер миҫал: «Уларҙы (ҡайын япраҡтарын) көҙгө елдәр осороп алып китәләр ҙә Иҙелгә илтеп ҡуялар; ағалар... Күҙҙән юғалалар. Ә тормош ул улай аҡмай. Уның ағышы ла, тулҡыны ла башҡа. Кеше лә — япраҡ, ләкин ул йәнле һәм шуның өсөн дә шаулап ағырға тейешле.

Тормош — шундай ҙур ҡайын. Кешеләр — уның япраҡтары. Улар ҙа өҙөлә. Тик улар тауышһыҙ ғына, тын ғына үтмәйҙәр. Улар үҙҙәренең йырын йырлап, көлөп, илап йәки йырҡысланыу менән үтәләр».

Бында инде тәбиғәт, уның биҙәктәре метафора рәүешен ала. Тәбиғәт тә, кешеләр ҙә, тормош та — донъяның бер күренеше, өлөшө, биҙәге.

«Боролош» романының башына эпиграф итеп шундай юлдар ҡуйылған:

*Төҙ аҡмаған кеүек йылғалар,*
*Кешеләр ҙә юлда боролалар.*

Был юлдар иһә, бөтә романға үҙенсә бер асҡыс булып, йылғалар боролоп-боролоп аҡҡан шикелле, кешеләрҙең ғүмер юлдары ла борма-борма икәнлекте иҫкәртеп торалар.

**Романдың художество үҙенсәлектәре.** Ғәйнан Хәйри романын хикмәтле генә инеш һүҙ менән башлай:

«Хөрмәтле уҡыусылар!

Хикәйәтте һөйләүҙән элек, һеҙгә белдерәһе нәмә бар. — Ҡараштарығыҙҙы ана теге йылғаға төшөрөгөҙ әле. Ул, әле бәләкәс булһа ла, мәғлүм бер алыҫлыҡта бик киңәйеп, ҙурайып китә. Әйе, йылғаның сыҡҡан ере тар була, ләкин ул, ни тиклем алыҫ аҡһа, шул хәтле ныгыраҡ киңәйә, сөнки уға... башҡа бик күп йылғалар ҡушылалар. Бергәләп шаулайҙар, бергәләп тулҡынланалар...

Бәлки, минең һеҙгә һөйләй торған хикәйәт тә шуға оҡшар...

Тын ағыу, томан менән ҡапланыу, ел-дауыл ваҡытында тулҡындарын ярға бәреү ҙә булғылар...

Һеҙ хәҙер минең карапта...»

Был инде романдың эпиграфын көсәйткән, йылғаны образға әйләндергән инеш. Кескәй генә сығанаҡтан бара-бара ҙурайып, ваҡ йылғалар ҡушылыуҙан хасил булған оло йылғаның берсә тынып, берсә тулҡынланып аҡҡаны шикелле, һөйләйһе кеше яҙмыштары ла шулай, хәлваҡиғалар ҙа төрлосә булыуына ишара был.

Ошо йылға образы шикелле, романда төрлө кинәйәләр, сағыштырыуҙар, метафоралар бик күп. Алда әйткәнебеҙсә, кешеләрҙе уратып алған тәбиғәт үҙе үк бер ҙур образ булып һынлана. Ул кешеләрҙең кәйефенә, хәл-ваҡиғаларҙың ағышына ҡарап үҙгәреп тора. «Елдәр, мөрйә башына ултырып, ҡурҡыныслы көйҙәрҙе көйләй», — ти икән автор, уның ниндәйҙер ҡурҡынысллы ваҡиға булырын иҫкәртеүен аңлайһың. Йәки «Киске ҡояштың яртыһын тау тешләгән. Көндәгесә, тау бөгөн дә ҡояшты йотор...» — тигән юлдарҙы уҡығас, ниндәйҙер хәүеф булырын көтәһең. «Яҙ үҙенсә матур, ғөрләүектәр, йырғанаҡтар барыһы ла шаулай, барыһы ла йырлай», — инде күңеллегә юрайһың. Шулай була ла — юрағаның юш килә.

Бына тағы бер тасуир: «Ҡояш урам тәҙрәһенән өй эсенә, тәҙрә төбөндәге эреле-ваҡлы, оҙонло-ҡыҫҡалы, төрлө сәскәле гөлдәрҙең япраҡтары араһынан ҡарай. Гөлдәрҙең сәскәләре өй эсенә, шулай уҡ ап-аҡ селтәрле пәрҙә аша урамға ла йәмен сәсә.

Сәхибә лә шулай — тап ғөл шикелле инде!»

Быныһы инде киңәйтелгән сағыштырыу. Кешене ғөлгә тиңләү.

Тәбиғәт, уның биҙәктәре тураһында яҙғанда автор үҙе туранантура фәлсәфәгә лә күсеп киткеләй. Бына бер миҫал: «Әллә йөрәгеңдәге бушлыҡты тәбиғәт матурлығы менән генә тултыра алмайынса, икенсе бер нәмәне эҙләр инеңме? — тип уҡыусыға мөрәжәғәт итә автор. — Һис һүҙһеҙ, һис һүҙһеҙ эҙләр инең, сөнки уны күптәр эҙләгән һәм уны эҙләрҙәр!

Янында юҡ нәмәне эҙләп табып булмаһа ла, хыял юҡ нәмәне тыуҙыра, ләкин хыялды аң үлтерә... Кешенең уйлаған нәмәһенең, шул уҡ ваҡытта кеше хыялының теүәлләнеүе, уның әйләнәһенә, әйләнәһенең нигеҙле булыуына бәйләнгән. Тәбиғәтте... ир ҙә, ҡатын да ярата, ләкин тәбиғәттең был яратылыуы кешенең тормоштағы һәр бер теләгенә яуап бирмәй. Шуға күрә лә һәр кем үҙенең хис типкене арҡаһында, йәнһеҙ тәбиғәт ҡаршыһында уға көндәш итеп, йәнле тәбиғәтте тыуҙыра».

Тәбиғәтте йәнле кешеләй итеп биреүҙең бер хикмәтен ошонда күрә. «...Һалҡын көслө, тәҙрә быялаларына тәбиғәт-ҡыҙ сигеү сиккән». «Йәйге тын, аяҙ төндә янған төн фонаре — ҡарт ай ауыл уртаһындағы ҙур күл-

деӊ өҫтөнә уттан күпер һалды». Бына шундай матур метафоралар менән дә йәнләндерә тәбиғәтте.

Ғәйнан Хәйри шағирҙыӊ прозалағы тасуири саралары ла шулай йыш ҡына шиғри биҙәкле, яҙыу стиле лә ритмик прозалағы шикелле тигеҙ ағып бара. Романда шиғри тасуирлауҙары, шағирәнә тамашалары бик күп. Шиғри стиль ҡайһы ваҡыттарҙа публицистик стиль менән аралашып киткеләй. Автор ҡайһы бер хәл-ваҡиғаларға ҡарата үҙ фекерҙәрен белдергәндә йәки үҙе аӊлатырға тотонғанда асыҡ күренә был. Кинәйәле хикәйәт алымдарын ҡуллана (Шәйхи ҡарт хикәйәттәре һ. б.).

«Боролош» — жанр тәбиғәте менән күп планлы тормош-конкүреш романы. Автор үҙе был әҫәрен **революцион роман** тип исемләгән хәлдә лә, униӊ үҙәгендә революцион ваҡиғалар ғына тормай. Ул халыҡ тормошона, кешеләр яҙмышына революцияныӊ нисек йоғонто яһауын асырға тырыша. Романдыӊ сюжеты Ғариф бай, Сәхибә, Шәмси, Ғәли һ. б. йәш кешеләр тормош юлы тирәһенә тупланып, тармаҡланыбыраҡ йәйелә. Уға йәнә Баһау Нуриманов, Мәүлетов, Солтан кеүек персонаждар менән бәйле өҫтәмә сюжет һыҙыҡтары ҡушыла. Ваҡиғалар күберәк ауылда бара. Ҡайһы бер геройҙарҙыӊ (Шәмси, Ғәли, Солтан) ҡалаға китеп уҡыуы йә эшләй башлауы менән ҡала тормошо ла байтаҡ тасуир ителә.

Роман композицион яҡтан шаҡтай йыйнаҡ һәм бер бөтөн. Ул 19 бүлектән тора. Бүлектәр, нигеҙҙә, айырым геройҙар тормошон берәмләп йә аралаштырып хикәйәләү рәүешендә ойоша. Айырым хикәйәт, хаттар, көндәлектәр формаһында төҙөлгән бүлектәр ҙә бар («Солтан мөхәббәте», «Мәүлетов трагедияһы», «Тулҡын артынан»). Былар геройҙарҙыӊ рухи донъяһын, психологик хәлен асығыраҡ күрергә ярҙам итә.

Ғәйнан Хәйри хәл-ваҡиғаларҙы объектив тәбиғи ағышында хикәйәләп килгәндә ҡайһы саҡта үҙе лә һүҙгә ҡушылып китә, теге йәки был ваҡиғаға үҙ мөнәсәбәтен белдерә, баһа бирә, китап уҡыусыныӊ фекерен ниндәйҙер мәсьәләләргә тупларға тырыша. Мәҫәлән, ул романын уҡыусыға туранан-тура мөрәжәғәте менән башлаған булһа, аҙаҡҡа табан геройҙары тураһында йомғаҡ рәүешендәрәк һүҙе менән тамамлағандай итә. «Хөрмәтле уҡыусылар! Беҙ хәҙер оҙон хикәйәттеӊ ахырына тамам яҡынлаштыҡ, — тип яҙа автор. — Һеҙ, зинһар: «Ни эшләнә? Униӊ менән ни булды?» — тигән һорауҙар менән үҙегеҙҙе борсомағыҙ. Улар хәҙергә бөтәһе лә иҫәндәр, тимәк, шулай булғас, улар бөтәһе лә һеҙҙеӊ йөҙҙәрегеҙгә икенсе тормош һәм икенсе бер тәьҫир аша ҡарарҙар. Тик һәр береһенә иғтибар, иғтибар — шунһыҙ момкин түгел.

Ер шарында быуаттар күрмәгән бөйөк боролош беҙҙеӊ илдә яһалды. Һәр еңеү беҙҙә ҡалды һәм ҡалыр. Тик ҡайһы бер шарттар ҡайһы берәүҙәрҙе бөгөләргә мәжбүр итте».

Автор үҙе лә үҙ геройҙары яҙмышы, тормошо, донъя тураһында аратирә уйланыуҙарға бирелеп тә ала. Былар бөтәһе лә романдыӊ эске айышын тәрәнерәк аӊларға булыша.

Романдыӊ теле матур һәм бай. Яҙыусы башҡорт һөйләү теленеӊ лексик байлығын, стилистик сараларын иркен файҙалана. Геройҙарыныӊ телмәрен, характерҙарынан, йәш үҙенсәлектәренән сығып, үҙенсәлекле итеп ҡора. Һәр геройҙыӊ үҙенсә телмәр сифаты, үҙенсә һүҙ төҙөлөшө. Әйтәйек, тәжрибәле Ғариф бай һөй-

ләгәндәре менән йәш кеше, яңыса уҡыған Шәмси, Ғәли һөйләгәндәрҙе бутап булмай. Ҡатын-ҡыҙ образдарын (бигерәк тә Сәхибәне, Сабираны, Иыһанды) үҙ холоҡ-ҡылыҡтарына хас һөйләшеүҙәре аша йәнле итеп кәүҙәләндерә.

Романда хикәйәт, әңгәмә алымдарының киң ҡулланылыуы, йыр, таҡмаҡ, төртмә һүҙ, кинәйәле һүҙҙәр уның тел-стилен тағы биҙәп, төрләләндереп ебәрә. Автор архаизмдар менән мауыҡмай. Романдың теле башҡорт халҡының һөйләү теле менән ул саҡ әле нығынып килгән әҙәби теленең оҫта, матур берләшеүенең өлгөһө булып тора.

**Ғ. Хәйри ижадының әһәмиәте.** Ғәйнан Хәйри башҡорт совет әҙәбиәтенең беренсе үҫеш осорона ҙур ғына ижади хеҙмәтен ҡуша алды. Ул поэзия өлкәһендә революцион рухлы шиғырҙар яҙҙы, шиғриәттә жанр формаларын, ритм-интонацион мөмкинлектәрҙе киңәйтеүгә ярҙам итеште.

Башҡорт совет прозаһының формалашыуында Ғ. Хәйриҙең өлөшө тағы ҙурыраҡ. Ул матур-матур хикәйәләр, очерктар ижад итте. «Кооператорҙар», «Ҡатын», «Өсәүҙең тарихы» повестары йәштәр образы менән әҙәбиәтебеҙҙе байытты. Уның күпселек геройҙары заманса фекер йөрөткән эшсән, эшмәкәр кешеләр.

«Боролош» романы менән иһә Ғ. Хәйри тәүге башҡорт совет романының үрнәген бирҙе. Ул үҙенең әһәмиәтен хәҙерге заманда ла һаҡлап килә.

Ғәйнан Хәйри үҙен Октябрь революцияһы тыуҙырған яҙыусы һәм уның йырсыһы, тип иҫәпләнә лә, ул Октябрь көндәре һәм егерменсе йылдарҙағы тормошто, совет ысынбарлығын тормоштағыса һәм бар ҡатмарлығында сағылдырырға тырышты.

Ул үҙенең замандаштарының, үҙе һүрәтләгән йәш геройҙарының киләсәге яҡты тип ҡараны, уларҙы тормошта көрәшсе, эшмәкәр кеше итеп күргеһе килде, шулай итеп кәүҙәләндерҙе. Китап уҡыусыларын да шул рухта тәрбиәләргә тырышты. Утыҙынсы йылдарҙағы бер мәҡәләһендә ул былай тип яҙҙы: «Богонго кеше кисәге өсөн түгел, бөгөнгө һәм бигерәк тә иртәгеһе көн өсөн йәшәй. Уҡыусыны тормошҡа бөгөнгө күҙлектән ҡарарға, иртәгә һәм киләсәк тормош, алғы көрәш өсөн көрәшсе итеп тәрбиәләргә кәрәк».

Ғәйнан Хәйриҙең тормошта ла, ижадта ла төп девизы «көрәш» ине.

• • •

1. Ғәйнан Хәйриҙең тормош юлы. Ул йәшәгән осорҙоң үҙенсәлектәре, заманының яҙыусы шәхесенә, донъяға ҡарашына йоғонтоһо. Яҙыусының шәхесенә хас сифаттар хаҡында уҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ.
2. Ғәйнан Хәйриҙең тәүге шиғыр китабының «Беҙҙең яҙ» тип аталыуының сәбәбен йыйынтыҡҡа ингән шиғырҙары миҫалында аңлатығыҙ.
3. Ғәйнан Хәйриҙең хикәйә, очерктарының, повестарының исемдәрен, идея-тематик йөкмәткеләрен, образдарын асыҡлап үтегеҙ.
4. «Боролош» романы буйынса алдан бирелгән һораҡар ярҙамында семинар дәрескә әҙерләнегеҙ.